Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

# «Балалар баҡсаһында башҡорт ҡатын – ҡыҙҙарының биҙәүесе «селтәр» менән таныштырыу

## темаһына проект

**(өлкән төркөм)**



**Әҙерләне:**
**Сыңғыҙова Л.Ф.**

**Шамонин ауылы**

*“Заман менән заман уралған, ти ҡобайыр. Ысындан да, улар айырылғыһыҙ; үткән заманды белмәй, хәҙергене төшөнөү ҡыйын икән,хәҙергене аңламайынса, киләсәкте күреү мөмкин түгел.”Заман”, “Тыуған ил” төшөнсәләре үҙҙәре үк шул үткәне, хәҙергеһе, киләсәге менән бер бөтөн. Һәр кемгә тыуған халҡының тарихын белеү ҙә би кәрәк*

*Шунһыҙ кеше нәҫел - нәсебен онотҡан, тарихи хәтерен юғалтҡан хәтерһеҙ бер бәндәгә әйләнер ине”.*

*Ғ.Б. Хөсәйенов.*

Беҙ етеҙ тиҙлек менән фән, техника, компьютерҙар технологиялары үҫешкән ваҡытта йәшәйбеҙ. Бәләкәй генә бала ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән телефон, айпад, планшет һәм интернетты үҙләштерә һәм белә.

Әлбиттә компьютер кеше тормошон, уның эшен күпкә еңелләштерә,уға кәрәкле мәғлүмәт бирә, ләкин ул кешеләрҙе айыра, уларҙы яңғыҙлыҡҡа, битарафлылыҡҡа этәрә. Йәмғиәттә һәм ғаиләлә үҙ - ара аралашыуға мохтажлыҡ килеп тыуа. Шуға күрә лә беҙ, тәрбиәселәр, ата-әсәләр һәм балаларҙың башҡорт халҡының тарихы, ғөрөф - ғәҙәттәре, мәҙәниәте менән таныштырып, ошо бушлыҡты тултырырға булдыҡ. Тыуған илгә, ергә. телгә һөйөү хисе, ғаиләләге хәстәрлек кешеләрҙе милләт булараҡ берләштерә.

**Проблеманың асылы (актуальность)**

Өфө районы Шамонино ауылы яңы төҙөлгән ауылдарҙан һанала. Уның төп халҡы – башҡорт милләтенән. Улар Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, үҙҙәренең йолалары һәм ғәҙҙәтәре менән ошо ергә күсеп ултырғандар. Ошо йолаларҙы, ғөрөф - ғәҙҙәттәрҙе берләштереү, йыйыу, көндәлек тормошта ҡулланыу, ғаиләлә еткелек кимәлдә киләсәк быуынға еткерә белмәүҙе иҫәпкә алып, балалар баҡсаһында был йүнәлештә беҙ эш башланыҡ.

Был мәслихәт эштәр, ғөмүмән, боронғоға әйләнеп ҡайтыу түгел тип аңларға кәрәк, ә беҙҙең көндәрҙә кәрәклеләрен, тәрбиәүи яктан әһәмиәтлеләрен ҡулланыу, көнүҙәктә нығытыу - беҙҙең төп бурысыбыҙ булып һанала. Иң тәүҙә беҙ башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының биҙәүәстәренең бер төрө - һаҡал, селтәр, яға менән таныштырырға булдыҡ. Ғөрөф - ғәҙәтле. Йолалы халыҡ - ул көслө милләт, ул төрлө ҡыҫымдарға ныҡлы ҡаршы тора ала. Ошоно халыҡ онотмаһа ине.

**Проекттың төрө:** Шәхси - социаль, ижади - мәғлүмәт төрө.

**Проектың дауамы:** сентябрь 2019 – апрель 2020 йыл.

**Проектта ҡатнашыусылар:** Балалар, ата - әсәләр, тәрбиәселәр, ағинәйҙәр.

**Ҡатнашыусыларҙың һаны:** 30бала, 25 атай - әсәй, 17 - тәрбиәсе.

**Балаларҙың йәше:** 5 - 7 йәш.

**Эште алып барыуҙың ҡалыбы:** төркөм эсендә.

**Маҡсат:** балаларҙың дөйөм мәҙәниәтен киңәйтеү. Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарҙың биҙәүес әйберҙәре аша Башҡортостандың халыҡтар мәҙәнийәте менән таныштырыу. Уларҙы биҙәүестәр менән ҡыҙыһындырыу, үҙ милләтеңә ҡарата ғорурлыҡ һәм һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

Проекты тормошҡа ашырыуҙа ошондай бурыстар ҡуйылды:

*Белем биреүсе бурыс:*

- башҡорт халҡының йола, ғөрөф – ғәҙәттәре, Һөнәрҙәре менән танышыуға булышлыҡ итеү;
- башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының күкрәк өсөн биҙәүестәре тураһында белемдәр киңәйтеү;

*Үҫтереүсе бурыс:*

- халыҡ, ил тарихына, йолаларға танып белеү ҡыҙыҡһындырыу;
- матур ювелир биҙәүестәр эшләүсе һөнәр эйәләренең (зәргәр) хеҙмәте менән ҡыҙыҡһындырыу. Зәргәр һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт уятыу.

*Тәрбиәләүсе бурыс:*

- башҡорт халҡының мәҙәниәтенә ихтирамлы хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү;

- кеше хеҙмәтенә, һөнәренә, шөғөлөнә, хеҙмәт әйберҙәренә ҡарата ҡиммәтле ҡараш тәрбиәләү;

- тыуған республикаға һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

*Балаларҙа:*

1. Башҡорт халҡының йәшәйеше, мәҙәниәте, һөнәрҙәре һәм шөғөлдәре тураһында белемдәр алыуға булышлыҡ итеү.
2. Тарихҡа һәм халыҡ йолаларына таныпп белергә ҡыҙыҡһындырыу.
3. Балаларҙа иртә һөнәр һайлауға булышлыҡ итеү.

*Тәрбиәселәрҙә:*

1. Предметлы - үҫтереүсе мөхитте үҫтереү, ата - әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә булыу;
2. Проект ваҡытында әҙерләгән ҡулланмаларҙы дәрестәрҙә, тематик сығыштарҙа ҡулланыу.

*Ата - әсәләрҙә :*

1. Балалар баҡсаһында барған ижади - тапып белеү эшмәкәрлегенә актив ҡатнашыу, балалар менән яҡынайыуға һәм йылы мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килтереүгә булышлыҡ итеү.

Проекты тормошҡа ашырыу этаптары**: алдан әҙерләнгән план буйынса алып барыла**. (1-се ҡушымта)

**Проектың үҙенсәлектәре:**

- ғаиләлә алған тәжрибәгә таянып эш итеү;

- ҡулланмаларҙың мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн аңлайышлы булыуы;

- балаларға башҡорт халҡының сәнғәт әйберҙәре менән таныштырыуҙа, ғаилә ҡиммәтәре менән таныштырғанда ата - әсәләрҙең яҡындан тороп практик ярҙамы булыуы.

Балалар менән “Һинең дуҫтарың”, “Дуҡлыҡ”, “Минең өйөм”, “Минең ғаиләм”, “Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ”, “Беҙҙең ауыл”, ”Башҡорттарҙың кейемдәре” тигән әңгәмәләр үткәрҙек. Улар Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың йолалары, сәнғәте һәм ҡиммәттәре тураһында белемдәр алалар.





Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙары көмөштән, аҫыл таштарҙан, аҡсаларҙан эшләнгән биҙәүестәрҙе яратҡандар. Балалар менән сәйләндән сәс ҡаптырғыстар, йөҙөктәр эшләү өсөн дәрестәр үткәрҙек.






Проект барышында алған белемдәрҙе нығытыу өсөн төрлө дидактик уйындар уйнаныҡ; ”Биҙәк төҙө”, “Башҡорт орнаментын таны”, ”Башҡорт лотоһы”, “Башҡорт балаҫын төҙө”.





Баймаҡ ҡалаһының халыҡ ансамблен саҡырҙыҡ. Улар йылда яңы музыкаль программа алып киләләр. Шулай уҡ тыуған яҡ пейсаждары менән Зәбир Тувалевта улар менән килә.



Әртистәр сағыу башҡорт милли кейемдәрендә сығыш яһап, зауыҡ, матурлыҡ ҡанундары тыуҙыралар. Балалар милли музыка ҡоралдары менән таныштылар, халыҡ һәм композитор көйҙәрен тыңланылар, башҡорт бейеүҙәре хәәрәкәттәрен башҡарып моң - хәрәкәт ихтияждарын ҡәнәғәтләндерҙеләр. Зөлхизә апай ҡатын - ҡыҙҙарҙың милли кейемдәрен, биҙәүестәрен күрһәтеп һөйләне. балалар селтәрҙә, һаҡалда сулпылар сыңлауын ишетһен өсөн Зөлхизә апай махсус музыкаһыҙ ғына бейеп тә күрһәтте.



Нәфис - эстетик белем биреү эшмәкәрлегендә балаларға халыҡ һынлы сәнғәт әйберҙәре, кейем - һалымды биҙәкләү. Зауыҡлы эштәр тураһында төшөнсәләр бирҙек. Ижади эш менән ҡыҙыҡһындырып, башҡорт халыҡ сәнғәтенә һөйөү һәм ғорурлыҡ тойғоһо уяттыҡ.





Тәрбиәселәрҙең ижади ҡомарын иҫәпкә алып, селтәр, һаҡал эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙек. Хәҙерге көндә һәр тәрбиәсенең шәхси селтәре бар.Улар селтәрҙе һәр байрамға, сараларға кейәләр.









Әүәләү дәрестәрендә лә селтәр менән танышыу һәм бармаҡтарҙың ваҡ мускулатураһы нығынһын маҡсатында, пластилиндан биҙәүес эшләп, мәрйендәр менән биҙәнеләр.





Селтәр боронғо замандарҙа ғаиләлә биҙәүес кенә булып һаналмаған. Ул ҡара көстәрҙән һаҡлау, һаҡлыҡ банкаһы ла булып торған. Был турала бик ҡыҙыҡлы итеп Гөлсирә инәй скайп аша һөйләнә.





**Уйын: ”Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр”**





**Уйын: “Хазина” магазины (Зәргәр салоны).**









Башҡорттарҙың бик борондан килгән шөғөлө - кейеҙ баҫыу булған. Бөгөнгө көндә ул тулыһынса тергеҙелә. Балаларға Ҡорманова Рита Ғабдулйәновна кейеҙ эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте. Ул кескейҙәр менән ҡайһы бер биҙәүестәрҙең өлөштәрен эшләп. Яңы шөғөлдө бик ҡыҙыҡлы таптылар.






Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының биҙәүестәре менән таныштырғанда Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Оҫта ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдиновты ла ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ. Ул үҙе көмөштән йөҙөктәр, беләҙектә, тәңкәләр эшләй. Миңлеғәфүрҙең көмөш биҙәүестәр йыйылмаһы беҙҙе бик һоҡландырҙы.





Тәрбиәселәр пластик шешәләрҙе ҡырҡып, башҡорт ҡурсаҡтары эшләп, уға милли кейем формаһында буяп биҙәнеләр.







Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының биҙәүесе – селтәр, яға, хәситә, һаҡал менән таныштырыуҙың һөҙөмтәһе булып ”Ете ырыу” матурлыҡ һәм мода байрамы үткәрҙек. Балалар мода салонында ата - әсәләр менән әҙерләгән башҡорт кейемдәре менән биҙәүестәрҙе лә күрһәтеп, һоҡланғыс тамаша ҡылдыҡ.







Байрамға әсәйҙәр ҙә ҡанатланып, яулыҡтар менән бейеү әҙерләп килделәр һәм байрамды биҙәп. Балалар менән бергә күңел астылар.







Проект ысулы балаларға ҡыйын булған тыуған яҡты өйрәнеү темаһын төрлө яҡлап өйрәнеү, проблемаларҙың сиселешен күмәкләп эҙләү һәм сисеү был эште ҡыҙыҡлы .аңлайышлы итә. Был проектҡа һуңғы йылдарҙа бик актив эшләгән “Ағинәйҙәр” ойошмаһын да ылыҡтырҙыҡ.Яңы быуынға ағинәйҙәр халыҡтың боронғоһон, йолаларын, фольклорын өйрәтеп. Тыуған ергә, халыҡҡа, телгә һөйөү һәм хөрмәт тәрбиәләйҙәр.Уларҙың эшенең дә бер йүнәлеше – башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының боронғо биҙәүесе; һаҡал, яға, хәситәне тергеҙеү булып тора.

Ағинәй Рәйфә Фирғәлиевна беҙҙең байрамға килде.Сағыу, матур, тәрбиәүи сара ойошторған өсөн балаларҙы, ата - әсәләрҙе, тәрбиәселәрҙе маҡтаны, хупланы. Һәр йәшкә тәғәйенләнгән – бәләкәй ҡыҙҙарға, урта йәштәге ҡатындарға һәм өлкәндәргә биҙәүестәрҙең төрлө булыуын күрһәтеп һөйләне һәм аңлатты. Артабан да тығыҙ аралашып хеҙмәт алып барырға һөйләшеп ҡунаҡты оҙаттыҡ.





Бөтә ошо саралар балаларҙа башҡорт халҡының үткәне, ырыуҙары. Һәр ырыуға ғына хас йолалары, кейемдәре. Биҙәүестәре менән таныштырып, тойғоларҙы байытыу, ғаиләләрҙе берләштереү, ҡыҙыҡһыныу уятыу төп маҡсат булды. Проектта ниәтләгән маҡсаттарыбыҙға ирештек. бурыстарыбыҙҙы үтәнек.

Шулай уҡ был проекты беҙ социаль селтәрҙәрҙә һәм “Йәншишмә“ гәзитенә яҙып сағылдырҙыҡ.





Киләсәк һинән башлана

# Йәншишмә

БАШҠОРТОСТАН БАЛАЛАР ҺӘМ ҮҪМЕРҘӘР ГӘЗИТЕ

Гәзит 1930 йылдың 12 февраленән нәшер ителә. Йома көнө сыға.

Беҙҙең сайт: www.yanshishma.ru E-mail: yanshishma@yandex.ru

## Тирмәкәй

№5

Май, 2018 йыл.

### КЕСКӘЙҘӘР ӨСӨН

## Ҡыҙҙарға биҙәүестәр оҡшай

Шамонин ауылының «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһында «Ҡояшҡай» төркөмө «Башҡорт кейеменең матурлығы» исемле фольклор байрамы ойоштороҙо. Ата-әсәләр балаларына матур, ҡупшы башҡорт кейемдәре текте, биҙәүестәр әҙерләне. Ҡыҙҙарға һаҡал, селтәрҙәр эшләнеләр.

Байрам тантанаһы бәләкәстәрҙең мода күрһәтеүе менән башланып китте. «Ҡояшҡай»ҙар ете ырыуға бүленеп, уларҙың тамғаһын, ағасын, ҡошон һәм оранын әйтте. Үҙ ырыуына ғына хас биҙәүестәрҙе, һаҡал-селтәрҙәрҙе маҡтап, шиғырҙар һөйләнеләр, йырланылар, бейенеләр. Кескәйҙәрҙең үҙ милләтенә, уның тормош-көнкүрешенә ҡыҙыҡһыныуы ата-әсәләрҙе лә, ҡунаҡҡа килгән ағинәй Рәйфә Фирғәли ҡыҙы Вәлиеваны ла бик ҡыуандырҙы. Ҡыҙҙарға селтәрҙәр ныҡ оҡшап ҡалды, көн дә кейеп йөрөргә теләк белдерҙеләр.



Ҡыҙҙар мода күрһәтә.

Һәр баланың үҙ биҙәүесе булыуы уларҙың күңелдәрендә матурлыҡ хисен, милләт өсөн яуаплылыҡ тойғоһон үҫтерә. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының селтәре хәҙерге заман ҡыҙҙарына ла, әсәйҙәренә лә бик оҡшай. Һәр байрамға ошо матур һаҡал-селтәрҙәр кейеп йөрөргә һөйләштек.

Эйе, бөгөн балалар башҡорт рухлы булып, телде белеп, яратып үҫһен өсөн кескәйҙәрҙе бишек йыры, әүрәткес, тиҙәйткес, әкиәт менән таныштырыуы ғына түгел, фольклор байрамдарын да үткәрергә кәрәк.

*Лилиә*
**СЫҢҒЫҘОВА.**
*Өфө районы.*



Байрамдан һүң.

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**


- А.В. Молчева  Народно - прикладное искусство Башкортостана А.В. Колбина
- Прграмма по декоративной деятельности детей дошкольного возраста на основе башкирского народного декоративно – прикладного искусства. - Уфа: Деловая династия, 2014.
- Камалиева А. С. «Башкирский костюм. Технология. Конструкция. Декор». – Уфа: Китап, 2012. – 212 с.
- Руденко С.И. «Башкиры» - Уфа: Китап, 2006. – 376 с.

  Шитова С.Н. «Башкирская народная одежда». — Уфа: Китап, 1995. – 248 с.
- источник: http://nazaccent.ru/content/7661-bashkirskij-nacionalnyj-kostyum.html
- Галяутдинов И.Г. Поиграем вместе друзья. – Уфа.1995г
- Азнабаева Ф.Г. Труд - основа жизни. Уфа, 2007
- Азнабаева Ф.Г. Голбостан. Сибай, 2006.
- Азнабаева Ф.Г. Волшебные звуки. Уфа, 2004
- Нафикова З.Г. Молодец. Уфа, 2007
- Нафикова З.Г. Волшебные звуки. Уфа, 2004

**1-се ҡушымта**

***Проектты тормошҡа ашырыу буйынса план***

| Эш төрҙәре | Ҡатнашыусылар | Үткәреү ваҡыты | Дәрес формаһы |
|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 |
| ***Әҙерлек этабы*** | | | |
| Ошо тема буйынса методик әсбаптар уҡыу, төрлө күргәҙмәлелек, мәғлүмәт, дидактик уйындар туплау. | Күтәрелгән мәсьәләләр буйынса тәрбиәселәрҙең профессиональ юғарылыҡты күтәреү. | Сентябрь | Методик әсбаптар уҡыу, төрлө алымдар өйрәнеү. |
| Проектты тормошҡа ашырыу буйынса план төҙөү. | Проектты тормошҡа ашырыу буйынса күҙаллауҙы булдырыу. | Сентябрь | План төҙөү |
| Был проектты тормошҡа ашырыу өсөн балаларға һәм өлкәндәргә эш төрҙәрен бүлеп биреү. | Был проектта ҡатнашыусыларҙың мөһимлеген билдәләү | Сентябрь | Бурыстарҙы, эштәрҙе бүлешеп алыу |
| ***Төп этап*** | | | |
| Әңгәмәләр үткәреү: «Һинең дуҫтарың », «Дуҫлыҡ», «Тоғролоҡ», «Минең йортом», «Минең ғаиләм», «Яҡшылыҡ һәм яуызлҡ», «Беҙҙең ауыл», «Башҡорт халҡының милли кейемдәре», «Башҡорт халҡының | Дуҫлыҡ, тоғролоҡ, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, тирә-яҡ мөхит , башҡорт халҡының милли кейемдәре тураһында белемдәрен арттырыу. | Октябрь - апрель | Әңгәмә, һүрәттәр ҡарау, видеоролик-тар күрһәтеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| көнкүреше» | | | |
| Заколки для волос, кольца из бисера. Сәстәр өсөн ҡаптырмалар, сәйләндән йөҙөктәр эшләү. | Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәре тураһында белемдәрен арттырыу. Ҡул суҡтарының моторикаһын нығытыу, энә һәм еп менән эш итергә өйрәтеү. Балаларҙа ижади ҡараш тәрбиәләү, төҫ һәм композиция тойғоларын үҫтереү. | Октябрь | Дәрес үткәреү |
| Дидактик уйындар: «Биҙәкте йый», «Дуҫлыҡ уйыны», «Башҡорт биҙәген таны», «Башҡорт лотоһы», «Башҡорт балаҫының биҙәктәре» | Биҙәктәр һәм биҙәүестәрҙең өлөштәре тураһында мәғлүмәт биреү. Биҙәк төшөрөү ысулдарын өйрәтеү, төҫ менән аңлайышлы күренеш булдырыу. | Октябрь - апрель | Уйындар, күңел асыуҙар. |
| Баймаҡ ҡалаһы артистарының сығышы. | Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәре, музыка ҡоралдары, башҡорт әҫәрҙәре, бейеүҙәре, биҙәүестәре менән таныштырыу. | Ноябрь | Рәссамдар һәм әртистәр менән осрашыу. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Художестволы эстетик үҫеше: рәсем “Айһылыуға яңы күлдәк” | Ҡағыҙҙа әҙер һыҙым буйынса күлдәкте ҡырҡырға булышлыҡ итеү. Һүрәт төшөрөү алымдарын нығытыу, биҙәү һәм матурлыҡ булдырыу һәләтен , ижади күҙаллауҙы үҫтереү. | Декабрь | Скайп ҡулланып дәрес үткәреү |
| Селтәр эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе. | Селтәр эшләү ғөрөф-ғәҙәтен тергеҙеү, башҡорт мәҙәниәтенә ихтирам, эшһөйәрлек һәм үҙ хеҙмәтеңдең емешенә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. | Ғинуар | Оҫталыҡ дәресе |
| Әүәләү «Селтәр – һаҡал» | Барельеф ысулын ҡулланып селтәр эшләүгә булышлыҡ итеү. Күҙҙалау, хәтер, телмәр байлығы, фекерләү ҡеүәһе һәм биҙәк һалыу һәләтен үстереү.<br>Халыҡ сәнғәтенә һөйөү, оҫталар хеҙмәтенә ихтирам, яҡын кешеңә бүләк биреү теләген тәрбиәләү. | Февраль | Дәрес |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Видеомост с бабушкой Гөлсирой «Интересные исторические факты о нагруднике»<br>“Селтәр тураһында тарихи фактар» буйынса Гөлсирә инәй менән скайп аша һөйләшеү. | Знакомство с ролью нагрудника и его с финансовым благополучием семьи.<br>Селтәрҙең тотҡан урыны һәм | Февраль | Скайп аша һөйләшеү. |
| Сюжетлы – ролле уйындар “Әсәй һәм ҡыҙ”, “Ювелир магазины” | Һүҙлекте байытыу буйынса эште дауам итеү. Модельер, ювелир һөнөренә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Сюжетлы- ролле уйындарҙа төрлө сюжеттарҙы ҡулланып уйнарға өйрәтеү. Ролдәрҙе бүлешеп, уйын барышында төрлө диалогка ҡушылып китергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Үҙ - ара дуҫ уйнауҙы. | Октябрь - ғинуар | |
| Оҫталыҡ дәресе «Кейеҙ баҫыу» | Халыҡ биҙәүестәренә, ҡорамаларына ҡарата һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Эшһөйәрлек сифатын , үҙеңдең эшеңә һаҡсыл ҡараш | Март | Оҫталыҡ дәресе |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | тәрбиәләү. | | |
| Виртуоз - ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зайнетдиновтың сығышы | Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары, көмөш биҙәүестәр менән таныштырыу. Ювелир һөнәре менән һәм уның иҡтисади әһәмиәте менән таныштырыуҙы дауам итеү. | Апрель | Артист һәм ювелир менән осрашыу. |
| “Башҡорт ҡурсағы”. Оҫталыҡ дәресе. | Пластик шешәләрҙән башҡорт ҡурсағы эшләү һәм артабан биҙәүестәр менән биҙәү тәжрибәһе менән уртаҡлашыу, таратыу. | Апрель | Оҫталыҡ дәресе. |
| ***Йомғаҡлау этабы.*** | | | |
| «Матурлыҡ һәм мода байрамы» | Байрам кәйефе булдырыу, үҙ-ара йылы мөнәсәбәт тәрбиәләү, эмоциональ кисереш | Апрель | Байрам |
| Социаль селтәрҙәрҙә, матбуғат биттәрендә яҡтыртыу. | Балаларҙа милли мәҙәниәткә яҡынайтыу. | Апрель | Инстаграм-да, ВК-ла яҡтыртыу. |

**2-се ҡушымта**

**«Дуҫлыҡ” темаһына әңгәмә.**

Маҡсат: балаларға бер – береһенә дуҫтарса мөнәсәбәт тәрбиәләү

Бурыстар:

- Әхлаҡ сифаттары тәрбиәләү: дуҫ була белеү, дуҫлыҡты һаҡлау;
- Уҡыусыларҙың фекерләүен үҫтереү;
- Изгелек тәрбиәләү.

Йырсы С.Адамо «Дуҫлыҡ – ул бер – береңде тултырыу. Бер – береңде тулыһынса аң һәм күңел менән аңлау. Дуҫлыҡта мөһим: әгәр ҙә һеҙ яңғыҙ булаһығыҙ килһә, дуҫығыҙ һеҙҙе аңларға һәм ваҡытлыса китергә тейеш”.

- Нисек аңлайһығыҙ ошо аңлатманы «бер – береңде тулыландырыу“
- Ни өсөн йөрәк һәм аң бер үк хәлде төрлөсә ҡабул итәләр?
- Нисек дуҫлашырға өйрәнергә, уға өйрәнергә кәрәкме?
- Дуҫлыҡ ниндәй була?
- Һеҙ ниндәй дуҫығыҙ булырын теләр инегеҙ?
  Летчик һәм яҙыусы А. де Сент – Экзюпери «Әгәр ҙә кеше үҙенә оҡшаған ғына кешене хөрмәт итһә, ул тик үҙен генә хөрмәт итә», - тип яҙа.
- Ә һеҙ ниндәй фекерҙәһегеҙ?
  Ошо әйтемде хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм башҡалар менән аралашҡанда үҙегеҙҙе тикшереп ҡарағыҙ.
  - Һеҙҙең кемегеҙҙең дуҫтары бар?
  - Кемде дуҫ йәки иптәш тип һанап була ?
  - Һеҙҙең тиҫтерҙәрегеҙ араһында дуҫтарығыҙ бармы?
  - Был мәҡәлдәрҙә нимә тураһында әйтелә?
  - Дуҫ эҙлә, ә тапһаң – һаҡла
  - Аҡыллы дошманыңдан ҡурҡма, ә аңһыҙ дуҫыңдан ҡурҡ
  - Дуҫ бәләлә һынала
  - Һәйбәт дуҫ менән уңышта күңелле, еңел бәләлә
  - Бәләһеҙ дуҫыңды белеп булмай
  - Дошман шымып ҡалыр, дуҫ әйтеп ҡалыр
  - Ғәйбәт йөрөткән кешеләр менән дуҫ булма
  - Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын
  - Кемдең санаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың
  - Изгеләр менән дуҫлаш, яуыздарҙан ҡас

Әңгәмә “Изгелек һәм яуызлыҡ”

Әңгәмәгә әҙерлек: педагог балаларға алдан эш бирә: өлкәндәрҙең холоҡ – ғәҙәттәренә балаларҙың мөнәсәбәте (үҙҙәренән өлкәнерәк балаларға) ошо ваҡиғаларҙы һүрәттәрҙә күрһәтеү.

Һүрәттең артына йөкмәткеһен, ваҡытын һәм исемен яҙған мәғлүмәтмаҡсатлы була.

Әңгәмә барышы.

Педагог бөгөн һөйләшеүҙең әҙәпле, иғтибарлы, хәстәрлекле мөнәсәбәт тураһында барасағын хәбәр итә. Балаларҙан үҙеңде әҙәпле, мәҙәни тотоу нимәне аңлата, тип һорай. Тыңлағандан һуң, педагог яуаптарға асыҡлыҡ индерә һәм тулыландыра. Унан һуң бер нисә балаға үҙенең изге , әҙәпле танышы тураһында һөйләргә тәкдим итә. Кемде һәм ниндәй һыҙаттарға ҡарап кешене яуыз тип атап була. Балаларҙың яуаптары педагог менән анализлана.

Балаларҙы тыңлағандан һуң, педагог уларға уйларға тәкдим итә : ниндәй осраҡта һәм нисек улар үҙҙәренең дуҫтарына, яҡындарына, таныштарына яҡшы мөнәсәбәт менән ярҙам итә алалар.

Әңгәмәнең  варианты итеп, балаларҙың изге эштәре һәм яҡшы мөнәсәбәттәре төшөрөлгән һүрәттәр ҡулланырға була. Балалар, иллюстрацияларҙы ҡарап, уларҙың йөкмәткеләре тураһында һөйләйҙәр һәм ошо мәғлүмәткә баһа бирәләр. Бындай һүрәттәрҙең темаһы төрлөсә булырға тейеш: малай әсәһенә һауыт – һаба йыуырға , ауыр сумканы күтәрергә ярҙам итә. Балалар гөлдәргә һыу һибәләр, китаптарҙы матур итеп шкафҡа ҡуялар, щетка менән үҙенең һәм ҡустыһының пальтоһын таҙарта. Ҡыҙҙар һәм малайҙар ҡышҡы урманда ҡоштарға тағараҡка ем һалалар.

Альбомда изге һәм яуыз эштәрҙе алмашлап күрһәтергә: малай рогатканан ҡоштарға ата; ҡыҙыҡай автобуста ултыра, ә әбей эргәһендә баҫып тора; өлкән синыф уҡыусыһы сабыйҙы рәнйетә

Дидактик уйын “Биҙәкте йыйна»

Уйындың маҡсаты: бер нисә өлөштән, төҫтән һәм фигуранан торған башҡорт биҙәктәрен йыя белергә, анализларға, өлгө буйынса йыйырға, фекерләүҙе, иғтибарлыҡты баланың ғәмәли – предмет эшмәкәрлеге нигеҙендә үҫтерергә.

Йыһазландырыу: 2 ҙур һәм 16 бәләкәй карталар.

Уйындың ҡағиҙәһе:

1 вариант: уйында 2 – 6 бала ҡатнаша.һәр бер балаға бәләкәй карталар таратыла.Алып барыусы ҙур картаны күрһәтә, балалар үҙҙәрендә ошо биҙәктең  өлөшөн табырға тейештәр.

Ө вариант: ҙур картала күрһәтелгән биҙәкте балалар бәләкәй өлөштәрҙән йыйнайҙар, киҫелгән өлөштәрҙән кем тиҙерәк һәм дөрөҫ йыйнай, шул еңеүсе.

Дидактик уйын «Башҡорт балаҫының элементтары».

Уйындың маҡсаты: бер нисә өлөштән башҡорт биҙәген йыйнарға, иғтибарлыҡты, фекерләүҙе үҫтереү.

Материал: 8 киҫелгән карта

Уйындың ҡағиҙәһе:

1 вариант: уйында 6,3,2 кеше ҡатнаша.уларҫа ҙур карталар таратыла. Бәләкәй карточкалар алып барыусыла. Кем үҙенең өлөштәрен тиҙерәк таба һәм ала, шул еңеүсе.

2 вариант: алып барыусы ҙур картаны күрһәтә, аҙаҡ уны ҡаплай. Балаларға эш: иҫтә ҡалған өлөштәрен төшөрөргә. Кем күберәк элементтарҙы һүрәткә төшөрә, шул еңеүсе.

Дидактик уйын “ Башҡорт лотоһы”.

Материал: 4 ҙур һәм 32 бәләкәй карталар.

1 вариант

Уйындың маҡсаты: башҡорт биҙәү – ҡулланма сәнғәте менән таныштырыу.

Уйын барышы: алып барыусы ҙур карталарҙы уйынсыларға тарата. «Һүрәттә нимә күрәһегеҙ?» тип  һорай. Балалар үҙҙәренең һүрәттәренең йөкмәткеһен

һөйләйҙәр. Алып барыусы балаларҙың яуаптарын тулыландыра, нығыта һәм дөйөмләштерә.

2 вариант :

Уйындың маҡсаты: һүҙлек байлығын активлаштырыу.

Уйын барышы: алып барыусы  Был предметтар ниндәй карточкаға тәғәйенләнә? “ Әйт һәм дөрөҫ итеп һал.

Һүҙлек эше: тирмә, күнәк, мәрйен, күлдәк, бүрек, итек, ыштан, түшелдерек, елән, камзул.

3 вариант:

Уйындың маҡсаты: башҡорт әйберҙәрен танып – белергә.

Уйын барышы: балалар үҙҙәренә тап килгән карточкаларҙы һайлап алалар. Ҡалған карточкалар ситкә һалына. Кем үҙенең карточкаһын тиҙерәк яба, шул еңеүсе.

4 вариант:

Уйындың маҡсаты: башҡорт әйберҙәренең тәғәйенләнешен билдәләү.

Уйын барышы: балалар һәр бер әйберҙең тәғәйенләнешен билдәләйҙәр һәм нисек ҡулланыуын һөйләйҙәр.

Дидактик уйын « Татыу әйлән – бәйлән уйыны “

Уйындың маҡсаты: көнкүреш әйберҙәре һәм кейем – һалым тураһындағы күҙаллауҙы системаға һалыу һәм дөйөмләштереү. Башҡортостан республикаһы халҡының орнаменттарын айырырға өйрәтеү.

Материал: 8 ҙур һәм 64 бәләкәй карточкалар.

Уйындың ҡағиҙәһе:

1 вариант: алып барыусы уйнаусыларға ҙур карталар таратып бирә. Бәләкәй карточкалар күрһәтә һәм һорау бирә: «Предметты билдәләгеҙ Ниндәй картаға

ул тәғәйенләнгән?» Билдәһеҙ карталар ситкә һалына. Кем тиҙерәк үҙенең картаһын яба, шул еңеүсе.

2 вариант: ҙур карталар таратып бирелә, уларға алып барыусы бәләкәй карточкалар һалып сыға. Яңылыш һалынған карточкаларҙы табырға һәм дөрөҫ итеп һалырға тәҡдим итә. Кем был эште тиҙерәк атҡарып сыға, шул еңеүсе.

Дидактик уйын “Үҙеңдең башҡорт орнаментының элементын тап“.

Уйындың маҡсаты : башҡорт әйберҙәренең тәғәйенләнешен билдәләү.

Материал: 6 ҙур һәм 40 бәләкәй карточкалар.

Уйын барышы:

1 вариант: уйында 6,3,2 кеше ҡатнаша. Уларға ҙур карталар таратыла. Бәләкәй карточкалар алып барыусыла. Алып барыусы карточканы аса һәм элементты тасуирлап һөйләргә һәм уны ҙур картала табырға һорай. Кем үҙенең элементтарын тиҙерәк таба, шул еңеүсе.

2 вариант: уйында 2- 6 бала ҡатнаша ала. Алып барыусы бер тигеҙ итеп карточкалар тарата. Аҙаҡ балаларға ҙур картаны күрһәтә һәм ҙур карталағы элементтарҙы бәләкәй карточкаларҙа табып, өҫтәлгә һалырға тәҡдим итә. Дөрөҫ һайланған карточкалар ситкә һалына. Һуңынан икенсе ҙур карта алына һ.б. Уйындың һуңында кемдең карточкалары әҙ ҡала, шул еңеүсе.

3 вариант: алып барыусы ҙур картаны күрһәтә һәм аҙаҡ уны яба. Балаларға эш: хәтерегеҙҙә ҡалған элементтарҙы һүрәттәрҙә күрһәтергә.

**3-сө ҡушымта**

**Рәсем**

**Тема: Айһылыуға бүләккә башҡорт күлдәге.**

Башҡорт биҙәүесе - селтәр, яға, хәситә, алмиҙеү.

Программа йөкмәткеһе - Башҡорт халҡының милли кейемененең үҙенсәлектәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡатын - ҡыҙҙар күлдәге өсөн төҫтәрҙе һаәлап алыу һәм биҙәк төшөрөүҙе нығытыу.

Үҙаллылыҡ, ижади зауыҡ һәм күҙаллау һәләтен үҫтереү.

Милли кейемдәрҙең зауыҡлығын халыҡ көнкүреше сағылышы күрһәтеүгә ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:**

Ҡ. Дәүләткилдиев "Зәңгәр күлдәкле ҡыҙ", "Һунарсы башҡорт" картиналары,

Картиналар, силуэт - малай, ҡыҙ,шаблон,елән, камзол, сарыҡ, күлдәк, түбәтәй, селтәр, гуашь буяуы, ҡыл ҡәләм, салфетка, аудиояҙма: "Милли көй" башҡорт халыҡ көйө.

**Дәрес барышы:**

Гөлбикә илап килеп инә.

- Һаумыһығыҙ, һин кем, ниңә илайһың?
- -Мин – Гөлбикә. Тышта һыуыҡ.Мин өшөнөм.
- Ә ни өсөн йылы итеп кейенмәнең?
- -Ә мин ниндәй кейемдәр кейергә белмәйем. Минең башҡа кейемем юҡ.
- -Балалар, Гөлбикә ярҙам итәйекме?
- Эйе, ярҙам итәйек.
- Гөлбикә ниндәй кейемдәр кейергә белмәй. Ә беҙ нимәгә ҡарап кейем һайлайбыҙ ?

- Гөлбикә, бәлмәлә өшөмәçһең.Балалар, был әкиәт ҡыҙы Гөлбикәгә ниндәй кейем һайлайыҡ икән?
- (экранда башҡорт кейемдәре)

Дидактик уйын

**“Бер һүҙ менән әйт”**

**“Нимә артыҡ”**

**“Күлдәк тураһында һөйлә”**

- Балалар, ә Гөлбикәгә нимә кейҙерәйек?

- Матур башҡорт күлдәге.

-Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙары ниндәй төçтә рҙә күлдәк кейгәндәр?

- Ҡыҙыл, һары, йәшел.

- Эйе, башҡорт ҡатын - ҡыҙҙары оҙон, бер нисә йәберсәкле, сағыу таçмалы күлдәктәр кейгәндәр. Йәш ҡыҙҙарҙың йәберсәктәре 3-ән 7-гә тиклем булған, ә бына оләсәйҙәрҙең бер йәки ике йәберсәге булған. Беҙ Гөлбикәгә күлдәкте тәүҙә матур итеп һүрәткә төшөрәйек. Өçтәлдәр артына ултырығыҙ. Күлдәктәрҙең төçөн үҙегеҙ һайлап алығыҙ. Балаларҙың үҙ - аллы эшмәкәрлеге.

**4-се ҡушымта.**

***“Матурлыҡ байрамы”***

**Маҡсат:** Башҡорт теленә ҡарата һөйөү, ихтирам, ғорурлыҡ тойғолары уятыу, балаларҙың телмәрен халҡыбыҙҙың йырҙары, бейеүҙәре аша байытыу.

Бурыстар:

1) Белем биреүсе: Бай һәм матур итеп биҙәлгән боронғо кейемдәрҙең исемдәрен белеү, биҙәнеү әйберҙәрендә ниндәй таш, металл ҡулланыуын билдәләү.

2) Үҫтереүсе: Халыҡ сәнғәте хаҡында белем биреү, ҡул эштәрен өйрәтеү.

3) Тәрбиәүи: Балаларға ете ырыу аша милли рух, халҡына ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ, ҡәҙерләү, һаҡлау тойғоһо уятыу.

Байрамса биҙәлгән зал. Тантаналы музыка аҫтында ҡыҙҙар мода күрһәтәләр, икенсегә малайҙар менән килеп сығалар һәм зал буйлап ете урынға теҙелеп торалар.

**Алып барыусы:** Хәйерле көн хөрмәтле ҡунаҡтар, балалар.

Беҙҙә йыйын, әйҙә йыйын.

Һүҙ уйнатып күңел асырға

Йырҙар йырлап, бейей - бейей

Маҡтап башҡорт биҙәген.

1) Ете ырыу балалары .

Ҙур байрамға килгәндәр.

Ынйы - мәрйен таҡҡан ҡыҙҙар,

2) Милли кейем кейгәндәр. **(бала һөйләй)**

Тамьян һылыуы ҡыҙҙары ,

кейгән матур итектәр.

Еләндә - тулҡынлы биҙәк ,
әберкәле итәктәр. **(бала һөйләй)**

3) Үҫәргән ҡыҙы алһыу,
йөрәге унығ ярһыу,
камзулда - һарыҡ мөгөҙө.
күлдәге сағыу, алһыу. **(бала һөйләй)**

4) Табын ҡыҙҙары башында –
Әүернәле ашьяулыҡ,
Сыңрап тора ҡумыҙҙары,
Тыңлап таң ҡала халыҡ **(бала һөйләй)**

**5)** Салауат менән Азамат .
Бөрйән яғынан дуҫтар,
Думбырасы, ҡурайсылар,
Еләндәрендә – ҡусҡар.
Ҡыпсаҡ кейеме йондоҙло. **(бала һөйләй)**

**6)** Итектәрҙә еҙ үксә.
Егеттәребеҙ, һай,оҫта,
Ҡурайҙа уйнап үҫә.

**7)** Юрматылар кейеменең.
Биҙәге - осло үркәс.
Матур шиғырҙар һөйләйҙәр,
Телде яратып үҫкәс. **(бала һөйләй)**

**8)** Еләндәре-сағыу ҡояш,
Меңлеләр уйнай һорнай.
Тыпырлатып оҫта баҫа.
Һис тә оялып тормай. **(бала һөйләй)**

**Йыр.**

Ағинәй килеп инә:

- Һаумыһығыҙ, балалар. Ай – һай, йыйын йыйғанһығыҙ икән.

**Алып барыусы:**

- Эйе инәй, беҙ бөгөн башҡорттарҙың матур кейемдәрен күрергә,һоҡланырға маҡтарға һәм маҡтанырға йыйылдыҡ.

**Ағинәй:**

- Афарин,балалар.

Башҡорт халҡының

Кейеме ҡупшы шулай

Башҡорттоң кейемен маҡтап.

Күптән доньялар шаулай. Әйҙә, ҡарайыҡ инде.

**(Музыка аҫтында БӨРЙӘНДӘР уртаға сыға)**

**Ағинәй:**

Илегеҙ - (хор менән) Рәсәй!

Ватанығыҙ - Башҡортостан.

Ырыуығыҙ - бөрйән.

Ағасығыҙ - ҡарағас,

Ҡошоғоҙ - ҡарсыға,

Тамғабыҙ - ҡапҡа,

Оранығыҙ - тарауыл!

**Шиғыр (бала һөйләй) “Яғаларым – селтәрем”**

Яғаларым - селтәрем

Аҫыл таштан сигелгән

Йәшел, зәңгәр, ҡыҙылдан

Таҫмалар буйҙан - буйға.

**Алып барыусы:**

Бейегеҙ ҙә, бейегеҙ,

Биртенмәһен билегеҙ.

Хайран ҡалһын бар халыҡ.

Оҫталарҙы күрегеҙ.

**Бөрйән ҡыҙҙары бейеүе.**

**(музыка аҫтында ЮРМАТЫЛАР килеп инә)**

Ырыуығыҙ - юрматы,

Тамғағыҙ - һәнәк ,

Ҡошоғоҙ - балапан.

Ағасығыҙ - тирәк.

Оранығыҙ - аҡтүбә**.**

**Шиғыр (бала һөйләй) “Сәсмәүерем тәңкәле”**

Сәсмәүерем тәңкәле,

Таҫмалы сәсүрмәсе.

Ҡаптырмаһы - аҫыл таш,

Еләнен дә күрһәңсе.

**Алып барыусы:**

Ниндәй матур тамаша ,

Ҡараһаң күҙ ҡамаша .

Ниндәй кейем, биҙәктәр

Ил көмөш беләҙектәр .

Килсе, һылыу, күрәйек,

Бөтәһен дә беләйек.

**Йыр “Әллиләү – генәйем”**

**(ҮҪӘРГӘНДӘР килеп инә)**

Ырыуығыҙ - үҫәргән,

Тамғағыҙ - ҡойошҡан ,

Ҡошоғоҙ - торна.

Ағасығыҙ - миләш.

Оранығыҙ - туҡһаба**.**

**Шиғыр (бала һөйләй) “Ялтыр фирүзә таштары”**

Ялтыр фәйрүзә таштары

Сулпылары сылтыр суҡ,

Әйтерһең, тамсы ысыҡ.

**Уйын “**Осто, осто”

Беҙ, беҙ, беҙ кемдәр?

Йыһандағы йондоҙҙар!

Беҙ, беҙ, беҙ кемдәр?

Тарихтағы батырҙар!

Беҙ, беҙ, беҙ кемдәр?

Шәжәрәле тамырҙар!

Йондоҙҙо таны, батырҙы бел ,

Тамырҙы тот, табырһың ҡот

Булырһың башҡорт!!!

**АҒИНӘЙ:** Һай, афарин, балалар.

Осто - осто бөркөттөр осто!

Осто -осто торналар осто!

Осто - осто дөйәләр осто!

Дөйә осһа, һеҙ бейергә бик оҫта.

**БЕЙЕҮ**

**(ТАБЫНДАР КИЛЕП ИНӘ)**

Ырыуығыҙ - табындар,

Тамғағыҙ - ҡаҙаяҡ,

Ҡошоғоҙ - ҡарағош.

Ағасығыҙ - ҡарағас.

Оранығыҙ - салауат!!!

**Шиғыр (бала һөйләй). “Сәсмәүҙәре киң таҫма”**

Сәсмәүере - киң таҫма,

Тәңкәләре көмөштән,

Билдән түбәнгә төшкән.

Сылтыр тәңкә көлөшкән.

**ЙЫР “САЛАУАТ”**

Ырыуығыҙ - ҡыпсаҡтар**,**

Тамғағыҙ - тораҡ,

Ҡошоғоҙ - бөркөт.

Ағасығыҙ - ҡарама.

Оранығыҙ - аҡтүбә

**Шиғыр (бала һөйләй) “Ике япмыс итәге”**

Ике япмыс итәге,

Әтмәләре ҡыҙылдан.

Суҡтай кейенгәнһең бит,

Күҙ алмайым был ҡыҙҙан.

**Алып барыусы:**

Балалар бейеһендәр

Кейемдәре күренһен !

Кейенеп күрһәтһендәр

Модаға өйрәтһендәр!

**Йыр “Косилка - молотилка”**

**(ҠАТАЙҘАР килеп инә )**

Ырыуығыҙ - ҡатай,

Тамғағыҙ - ҡойошҡан ,

Ҡошоғоҙ - ҡауҙы.

Ағасығыҙ - артыш.

Оранығыҙ - тайлаҡ!

**Алып барыусы:**

Ҡара, ҡара, өарағыҙ.

Ни ҡылана балағыҙ.

Бер баҫыуҙа бишәр баҫа,

Баҫыуҙарын ҡарағыҙ

**Шиғыр (бала һөйләй). “Көмөш беләҙеге лә”**

Көмөш беләҙеге лә

Ҡалып һуғып эшләнгән.

Ҡупшы булһын тигәндәр,

Сит - ситтәре тешләнгән.

**Бейеү “Күбәләк”**

**(МЕҢЛЕЛӘР килеп инә )**

**Ырыуығыҙ - меңле,**

**Тамғағыҙ - ҡуш ҡабырға,**

**Ҡошоғоҙ - ҡыйғыр.**

**Ағасығыҙ - ҡайын.**

**Оранығыҙ - алаҫ!**

**Бейеү “Башҡортостан - гөлбөстан»**

**Ағинәй:** Матур байрамығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Һеҙгә күстәнәскә – башҡорт милли тәмлекәсе - бауырһаҡ. Төркөмгә ҡайтып сәй эсерһегеҙ.